■ Тәрбиә

# Быуындарҙы бәйләүсе иман

Оксана НАЗАРОВА



Әбйәлил районы Мораҡай ауылы ҡыҙы Ләйсән Фәтхуллина Башҡорт дәүләт университетында белем ала. Журналистика бүлегендә уҡыған ҡыҙҙар йыш ҡына уға дин тураһында һорауҙар менән мөрәжәғәт итәләр. Был аңлайышлы ла: Ләйсән башланғыс мәктәп йылдарынан уҡ ураҙа тота, ваҡыт үткәс, атаһы Даян Зәбир улы артынан тороп намаҙға ла өйрәнә.

***- Ислам диненә килеүеңә нимә сәбәпсе булды?***

- Өлкәндәр кескәйҙәрҙең аңына үҙенә күрә бер программа һала. Атай кеше телевизор эргәһенән китмәй ултыра, минут һайын тәмәке төтәтә икән, бала быларҙы ғәҙәти күренешкә һанай башлай. Мин атайымдың намаҙ уҡып, дин ҡанундарын үтәп йәшәүен күреп үҫтем. Әсәйем һәр ваҡыт атайға терәк булды.

Атай-әсәйем донъяға иң яҡшы күҙлек - Ислам күҙлеге аша ҡарарға өйрәттеләр, яҡындарҙы хөрмәт итергә, фәни, дини ғилем алыуҙың фәһемлеген еткерергә тырыштылар.

Өләсәйем Хәбибә Ғәбдрәшит ҡыҙы үҙенең йәшәү рәүеше менән мосолман ҡатын-ҡыҙы ниндәй булырға тейешлеген күрһәтте: биш намаҙын ҡалдырманы, буш ултырмай - сүрәләр ятланы, тормошҡа зарланманы, Аллаһҡа шөкөр итеп йәшәне, олатайыма ғаилә башлығы итеп ҡараны. Әле 70 йәштә инде ул. Икенсе өләсәйем йоҡларға ятҡанда "Лә иләәһә иллөллаһ, Мүхаммәдүр-расулуллаһ", ти торғайны. Был һүҙҙәр аңыма үтеп ингән, ҙурайғас улар миңә ят булманы, ни тиклем ҙур мәғәнә туплауҙарына төшөндөм.

**Бер көн Йәмилә апай улына мәҙрәсәгә юл тотасаҡтары тураһында хәбәр итә. Ғайса әсәһен һыуыҡ ҡыш айҙарында яңғыҙ ҡалдырғыһы килмәй, әммә белемле булыу - уның күптәнге хыялы.**

**Мәҙрәсәлә Йәмилә апай улын хәҙрәткә тапшыра. Ниндәй ҙә булһа ҡыйынлыҡтар килеп сыҡһа, егеткә ярҙам итеүҙәрен һорай. Улына әйткән һуңғы һүҙҙәре: "Һине башҡа күрмәм инде, балам". Ҡатын өйөнә ҡайтып етмәй, буран сығып китеү айҡанлы аҙаша. Тыуған Аһлай ауылы кешеләре уны яланда табып алалар, ҡотҡарып өлгөрмәйҙәр. Был ерҙе әлегәсә "Йәмилә яланы" тип йөрөтәләр.**

***- Университетҡа яулыҡ ябынып килгәс, һиңә ҡарата мөнәсәбәт ниндәй булды, ҡыйынлыҡтар бармы?***

- Яулыҡта йөрөү хәҙер ҙур яңылыҡ, тип әйтмәҫ инем. Мосолмандар һаны күбәйә, кешеләр Исламдың яҡты дин икәнлеген күреп торалар. Әлхәмдүлиллаһ, университетта миңә хөрмәт менән ҡарайҙар. Егеттәр башҡа ҡыҙҙар алдында насар һүҙҙәр ысҡындырһалар ҙа, яулыҡта булған ҡыҙ эргәһендә үҙҙәрен әҙәпле тоталар.

Уҡыу ваҡытында намаҙ ҙа уҡып өлгөрөп була. Тәнәфестә бер кем дә булмаған бүлмә табаһың да, гәзит түшәп, өҫтөнә намаҙлыҡ һалып уҡыйһың. Был соҫлоҡҡа өйрәтә. Буш ваҡытыңды ҡайҙа итергә белмәй ултырмайһың. Дин тәрбиәләй. Йәштәрҙең тормошто аңлауы үҫә, тәжрибәһе арта.

Хәҙер белем алыуы еңелләште. Ике ҡанатың зәғиф булмауы яҡшы: фани донъя ғилеме лә, әхирәт ғилеме лә булырға тейеш.

**Мәҙрәсәлә уҡыу түләүле. Йәй көндәре Ғайса байҙарға ялланып эшләргә мәжбүр. "Аҡсаңды уҡырға китер алдынан түләрмен", - тип ышандыра бер бай. Көҙ етеү менән ул егеттә ағас ҡырҡырға алып китә. Эште тамамлағандан һуң, Ғайсаны кипкән ҡыуыш ағасҡа төшөрөп ултырта - түләмәҫ өсөн үлтермәксе була. Егет ике көн ағас эсенән сыға алмай ыҙалана. Эсергә бер тамсы һыу юҡ. Аңын юғалтыр хәлгә етә. Ошо мәлдә утын артынан урманға бер ир килә. Был кеше Ғайса ултырған ағасты ҡырҡа башлай, ағас ярыла. Бысҡан кеше "пәрей ултыра икән" тип, ҡото осоп ҡаса.**

**Ҡотош исемле бай Ғайса менән булған хәлдәрҙе ишетеп, егеткә ярҙам итмәксе була һәм теге хәйләкәр байҙан бурыс аҡсаһын таптырта.**

**Һуңынан мәҙрәсәлә Ғайсаға бер нисә тапҡыр имтихандарҙы Зәйнулла ишан Рәсүлевҡа тапшырырға насип була. Остаз тырыш егеткә гел бишле ҡуя. Рәсәй мосолмандарының арҙаҡлы дин эшмәкәре шәкерте булыуына Ғайса бик ҡыуана, уның хаҡта хәтирәләрҙе ейәндәренә әкиәт урынына һөйләй.**

**Ғайса Хадыев тормошоноң ғәжәйеп һәм ҡыҙғаныс мәлдәре менән "Рисәләт" гәзитен уның ейәнсәре Хәбибә Фәтхуллина таныштырып үтте.**

***- Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө яҡынлаша. Киләсәктә әсәй буласаҡ ҡыҙҙарға ниндәй теләктәрең булыр?***

- Бер аҡыл эйәһе әйткәненсә, "ҡатын-ҡыҙ бер ҡулы менән бишек бәүелтә, ә икенсеһе менән - Ер шарын". Йәғни, һәр бер бөйөк ир артында ҡатын тора. Бала тәрбиәләү ҡатын елкәһенә йөкмәтелә шул. Әсә кеше бер тапҡыр ҙа ауыҙынан "Бисмиллаһ" һүҙен сығармаһа, бил балаға дингә ҡайтыу ауырлаша төшә. Әгәр ата-әсә балаһына миҫал итеп Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе (с.ғ.с.) ҡуйһа, сабый ысын мәғәнәһендә шәхес булып үҫәсәк, Иншааллаһ.

**Хәбибә һылыуҙың бер йәше тулыр-тулмаҫтан уның әсәһе яҡты донъянан китә. Өләсәһе менән олатаһы уны үҙ ҡанат аҫтына алалар. 14 йәшендә колхозға эшкә сыға. Йәше еткәс, Зәбир исемле егеткә тормошҡа сығып, бергәләп һигеҙ бала үҫтерергә насип була.**

**Хәбибә инәй 20 йыл намаҙҙа. Әле ейән-ейәнсәрҙәренә дин нескәлектәрен еткерә. Кесе улы Даян Мораҡай ауылында яҡташтары, Магнитогорск ҡалаһы кешеләре (Ишбикә инәй) ярҙамында мәсет төҙөткән, үҙе ғибәҙәт йортонда имам да. "Ғәмәлдәре менән фани, ә йөрәге менән баҡый донъяла" тигәндәй, Даян хәҙрәт донъя эштәренә лә ваҡыт таба: "Абҙаҡ" тау-саңғы үҙәгендә эшләй.**

**Хәбибә инәй әйтеүенсә, иманлы балалар үҫтереүҙең бер нисә ябай сере бар. Беренсеһе, ата-әсәнең иман ныҡлығы, ихласлыҡ. Барлыҡ фарыҙ ғәмәлдәрҙе башҡарыу. Икенсенән, "балаларҙы яратыр кәрәк, әммә был иркәләү менән бер түгел: эшкә лә уң булһындар". Сабыйҙар һәр ваҡыт ҡарау аҫтында булырға тейеш, уларҙың уй-ынтылыштарын аңлау мөһим.**

**"Йәш быуын кешеләре йомаға, вәғәзгә йөрөһә ине. Беҙ, оло йәштәгеләр, балаларыбыҙҙы үҫтергәнбеҙ инде, күп осраҡта беҙҙән эш тормай", - тигән фекерҙә Хәбибә Фәтхуллина.**



***- Ләйсән, яуаптарың өсөн рәхмәт. Бәлки, үҙеңдең әйтергә теләгән һүҙҙәрең булыр?***

- Шундай ғәжәйеп кешеләр аша миңә тәрбиә биреүенә Аллаһы Тәғәләгә бик рәхмәтлемен. Барыбыҙға ла йәннәттә булырға насип итһен.

# Ислам динендә тәрбиә ысулдары

Али СУАД

Иман йөрәктәрҙә тәбиғи рәүештә барлыҡҡа килә. Бер кемдә лә көсләп иманлы итеп булмай. Баланы диндә тәрбиәләү өсөн ата-әсә ягынан етди ниәт талап ителә. Тәү сиратта, "бала үҫтереү" һәм "шәхес тәрбиәләү" төшөнсәләрен асыҡлау, улар араһында булған айырманы күҙ уңында тотыу мөһим. Шул сакта балаға тәрбиә биреү процесы аңлы рәүештә барасаҡ һәм, әлбиттә, быныһ өсөн күп көс түгеү кәрәклеге асыҡланасаҡ. Һеҙ быға әҙерһегеҙме?

Иманлы кеше үҫтереү - Аллаһы Тәғәләгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, тигән һүҙ. Хоҙайҙы бар күңеле менән яратҡан бала Ул ҡушҡан юлдан атлаясаҡ. Был тойғо булмаһа, дини өгөтләүҙәрҙең мәғәнәһе булмаҫ. Дин тураһында хәбәрҙәр булыу - еңел, диндар булыу ауырыраҡ.

Тик яратырға өйрәтеп булмай шул. Был тойғо ниндәй икәнлеген үҙегеҙҙән Аллаһҡа, пәйғәмбәргә булған мөнәсәбәтегеҙ аша күрһәтә алаһығыҙ. Ислам динендә ҡулланылған бер нисә тәрбиә алымы менән таныштырып үтмәксемен. Иң башта - өйҙә йылы, дуҫтарса мөхит тыуҙырыу, бала менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеү. Сабый менән ихлас әңгәмә кора алһағыҙ, тимәк, ярты эш эшләнгән.

Балаларға ҡыҫҡа һәм шул уҡ ваҡытта күп мәғлүмәт туплаған яуап ҡайтарыр кәрәк. Оҙон-оҙаҡ аңлатмалар баланы ауырһындырасаҡ. "Ҡояш ҡайҙан килеп сыҡҡан?" - тигән һорауға ул түбәндә күрһәтелгән яуап алһа, бик яҡшы булыр: "Уны Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән: беҙҙе йылытып, яҡтылыҡ биреп торһон өсөн". Өс-дүрт йәшлек балаға йыһандың яратылыуы, уның төҙөлөшө тураһында ентекле һөйләү әле һис тә кәрәкмәйҙер. Ваҡытығыҙ сикле булһа ла, һорауҙарҙы яуапһыҙ ҡалдырмағыҙ.

Кескәйҙәр араһында киң таралған ҡыҙыҡһыныу: "Минең һеңлем (ҡустым) ҡайҙан килеп сыҡты?". Был осраҡта ла: "Аллаһ бүләк итте", - тип әйтеп була. Һәм өҫтәп: "Ул ҙурайғас, бергә уйнарһығыҙ, һиңә иптәш булыр". "Ҡауҙы алып килде", "кәбеҫтәнән табып алдыҡ" кеүек ялған һүҙҙәр ҙә кәрәкмәйәсәк. Быңдай алдыҡтар баланың аң үҫешен тотҡарлай ғына.

Сабыйға туғандары, яратҡан күренештәре Хоҙай тарафынан яратылыуын аңлатыу ҡасандыр Уға ҡарата һөйөү тыуҙырасаҡ.

Һәр бала өсөн үрнәк булырлыҡ шәхес - Мөхәммәт пәйғәмбәр (с.ғ.с.). Пәйғәмбәребеҙ "һәр бала мосолман булып тыуа" тигән, икенсе төрлө әйткәндә, бала был донъяға Аллаһты танырлыҡ камил холоҡ менән килә. Һәр сабыйға ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, белемгә ынтылыу хас. Ошоноң менән Хоҙай барыбыҙға мосолмандарға хас сифаттарға ирешергә ярҙам итә, бала тәрбиәләүҙе еңеләштерә.

Бер мәл Аллаһы Тәғәлә Дауытҡа (ғәләйһис-сәләм) былай тип бойора: "Колдарыма Минең хаҡта һөйлә. Мине яратһындар өсөн". Дауыт (ғәләйһиссәләм): "Мин Һинең турала һөйләй алам, әммә нисек итеп уларҙа һөйөү уятырға һуң?" - тип һорай. Шул саҡ Аллаһ: "Ҡолдарыңды Мин биргән байлыҡтар, муллыҡтар хаҡында исҡәрт. Мин уларҙың йөрәктәренә һөйөү хисе һалырмын", - тигән.

Ысынлап та, Аллаһы Тәғәләне яратыр өсөн, иң тәүҙә, Ул барлыҡҡа килтергән тәбиғәттең хозурлығына күҙ һалайыҡ: ағастарға, сәскәләргә, йондоҙҙарға; айға, ҡояшҡа, йыһанға - бер һүҙ менән әйткәндә - ғүмерҙең матурлығын аңлар кәрәк. Балаларға һәр әйбер Аллаһы Тәғәләнең беҙгә булған сикһеҙ һөйөүе арҡылы яратылғанын әйтеп китеү артыҡ булмаҫ. Мәҫәлән, емеш ашап ултырғанда, ошондай һүҙҙәр файҙалы буласаҡ: "Ҡара әле, бәләкәсем, Аллаһ беҙҙе ни тиклем ярата. Емештең тәҫә, тәме, еҫе беҙгә хуш килерлек итеп яратылған..." Бәлки, һис көтмәгәндә, ҡулдарына ошо емеште алып, улыгыҙ йә ҡыҙығыҙ: "Бәләһеңме, атай, мин дә Аллаһты бик яратам!" - тиер.

■ Яңылыҡтар

**ВЛАДИКАВКАЗДА МӘСЕТ-ПЛАНЕТАРИЙ АСЫЛАСАҠ.** Төньяҡ Осетия-Аланияла мәсет-планетарий асылыуы ихтимал. Был хаҡта республика мөфтөйөнөң президент Таймураз Мамсуров менән осрашыуында әйтелде.

Владикавказдағы изге йортта намаҙ ваҡытында барлыҡ мосолмандарға урын етмәй. Әммә ҡалала 300 кеше һыйҙырырлыҡ бина бар, ул ҡасандыр мәсет булған. Совет осоронда бина дәүләт мөлкәтенә күсерелә һәм планетарийға әүерелә. Әлеге ваҡытта планетарий эшләмәй, унда коммерция ойошмаларының офистары ғына урынлашҡан.

Мөфтөй Али Евтеев әйтеүенсә, республика башлығы был бинаны яңы планетарий төҙөлә башланғас ҡына мосолмандарға бирергә ризалашҡан. Һөҙөмтәлә, мөфтөй шундай ысул тәҡдим итә: әгәр бина Диниә назаратына ҡайтарылһа, мосолмандар ваҡыт-ваҡыты менән уны планетарий өсөн бирергә әҙер.

"Планетарий эшмәкәрлеге өсөн күп тә кәрәкмәй: ҡараңғы ҙур бүлмә һәм аппаратура", - ти Али Евтеев. Был фекерҙе Таймураз Мамсуров үҙ итте. "Бының менән беҙ халыҡҡа дин - фәндән йыраҡ торған тормоштоң ҡараңғы бер яғы түгел икәнлеген күрһәтә алабыҙ. Балалар мәсеткә иркен рәүештә инеп йөрөйәсәктәр, Исламға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт тыуасаҡ".

**ПАРАЛИМПИЯ СПОРТСЫЛАРЫ ВАНКУВЕРҒА ҠӨРЬӘН ТОТОП ЮЛЛАНДЫ.** Февраль уртаһында Мәскәүҙә Рәсәй паралимпия йыйылма командаһын Канадаға оҙаттылар. Ярыштар 12 мартта башланасаҡ. Быға тиклем спортсылар урындағы климатҡа өйрәнеп, трассаларҙы үҙләштерә торалар.

Мәскәү Йәмәғәт мәсетендә мосолман спортсыларының һәр ҡайһыһына Ҡөрьән бүләк ителде. Изге китапты улар үҙҙәре менән Канадаға алдылар.

**ПОЛЬША МАТЕМАТИГЫ АЛЛАҺТЫҢ БАРЛЫҒЫН ДӘЛИЛЛӘРГӘ ТЫРЫША.** Польшалағы ғалим, христиан дине әһеле фән өлкәһендә бирелгән иң ҙур премияға (820 мең евро) лайыҡ була.

Метафизика һәм математика өлкәләрендә эшләгән космология белгесе Михаль Геллерҙың теорияһы Аллаһтың барлығын дәлилләүҙән күберәк беҙҙе уратҡан донъяның материаль нигеҙҙә барлыҡҡа килеүенә шик һала. 72 йәшлек профессор математик юл менән ҡатмарлы формула сығара. Был формула барыһына, хатта осраҡлы күренештәргә лә аңлатма бирә.

Геллер әйтеүенсә, ул премияны Краковтағы яңы Фән һәм теология өлкәләрендәге тәжрибәләр үҙәге - Коперник үҙәген төҙөүгә тапшырасаҡ.

Профессорҙың эше донъяның барлыҡҡа килтерелеүе теорияһы нигеҙендә төҙөлгән. "Уның теорияһы Аллаһтың барлығын иҫбатламай, ләкин быға ситләтелгән дәлилдәр килтерә", - ти Краковтағы Ягеллон университеты ректоры Кароль Муйжель.

Ғалимдың әйтеүенсә, йыһандың сиге юҡ. Ҡайҙа һуң Аллаһ? Геллер ғәҙәти доктринаға ҡайтырға тәҡдим итә. Унда йыһандың барлыҡҡа килтерелеүе ваҡыттан һәм арауыҡтан ситтә торған акт, тип аңлатыла.